Башҡортостан Республикаһы Өфө районы муниципаль районы

Шамонин ауылының “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы муниципаль

мәктәпкәсә мәғариф бюджет учреждениеһы

**«Серле ҡурай» темаһына**

**дәрес конспекты**

**(өлкән төркөм)**



**Әҙерләне:**
**Хөсәйенова А.Р..**

**Шамонин ауылы – 2021й.**

**Өлкәндәр төркөмө өсөн белем биреү эшмәкәрлеге .**

**Тема: "Серле ҡурай"**

**Йүнәлеш:** тирә-яҡ донъяны танып-белеү.
**Белем биреү өлкәһе:** танып-белеү.
**Белем биреү өлкәһендә интеграция:** телмәр үҫтереү, нәфис-эстетик үҫеш.
**Маҡсат:** балаларҙың тирә-яҡ донъя, тыуған яҡ тураһында белемдәрен киңәйтеү.
**Бурыстар:**
**Белем биреү** -балалаларҙың ҡурай тураһында белемдәрен киңәйтеү; балаларҙа һүрәтләү хикәйәһе төҙөүҙе, һүҙъяһаусы ялғауҙарҙы ҡ улланыуҙы формалаштырыу.
**Үҫтереүсе -** Балаларҙың һүҙ байлығын арттырыуҙы, бәйләнешле телмәр үҫтереүҙе, сағыштырыу һәм анализлауҙы, фекерләүҙе үҫтереү.
**Тәрбиәләүсе -** Балаларҙа тыуған яҡҡа, халыҡ ижадына, музыкаға һөйөү тәрбиәләү.
**Методик алымдар:** һүҙ, күргәҙмә, дидактик уйын, хәрәкәтле уйындар.
**Ҡулланыу материалдары:** ҡурай, һандыҡ, күргәҙмә материалдар, дидактик уйы "Тылсымлы таҡта", проектор, ноутбук, аудиояҙма, йомғаҡ, аппликацияға материалдар.
**Һүҙлек эше:** таж, юрау, шифахана, ҡомартҡы, янсыҡ.

**Дәрес барышы**

**Тәрбиәсе**: Балалар, кәйефегеҙ нисек? (Кәйефебеҙ яҡшы.) Һеҙҙе иртәнсәк әсәйегеҙ ниндәй һүҙҙәр менән уята? (Яғымлы өндәшә. Аҡыллым, матурым, батырым, тип уята.) Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ әле. Ә бына элек әсәйҙәр, өләсәйҙәр балалаларҙы ошолайтып һамаҡлап уятыр булғандар, шул рәүешле көндө планлаштырғандар.

*Тәрбиәсе көйләп*: Тор-торҙан хәбәр килгән,
Тиҙерәк торһон, тигән.
Йыуынып, бутҡа ашап,
Уйнарға сыҡһын, тигән.

Күҙҙәрҙе астыҡ. Ҡарағыҙ әле, бында нимә тора? (Һандыҡ тора.)
Эйе, элек башҡорт халҡы әйберҙәрен һандыкта һаҡлағандар. Ҡомартҡы быуындан быуынға тапшырыла килгән. Миңә лә өләсәйем һандыҡ бирҙе. Унда нимә бар икәнен белгегеҙ киләме? (Һандыҡ асыла.) Бында хат бар. Уҡыйыҡ әле: "Балалар, минең һеҙгә бүләгем бар. Әгәр эштәрҙе теүәл үтәһәгеҙ, һандыҡ төбөндәге бүләк һеҙгә булыр Өләсәй".
**Тәрбиәсе:** Балалар, һәр үтәлгән эш өсөн таж ҡуйып барырбыҙ.
**Дидактик уйын "Һорауға яуап бир"**
*Тәрбиәсе һандыктан боронғо әйберҙәр сығара. Һорауҙар бирә. Яуаптарҙы балалар менән бергә ҡабатлау. Индивидуаль һорау биреү, ҡабатлатыу.*
**Тәрбиәсе:** Бына быныһы өләсәйемдең күлдәге. Ә был кейем нисек тип атала? (Камзул). (*Балалар менән бергә ҡабатлау.*)Был биҙәүес нисек атала? (Ҡашмау.) Ҡатын - ҡыҙҙарҙың биҙәүесе нисек атала? (Түшелдерек, беләҙек, мәрйен) Былары - ирҙәр кейемдәре (күлдәк, елән, түбәтәй, бүрек). (*Балалар әйберҙәр менән яҡынырак таныша, тотоп карайҙар.*) Ә быныһы – ҡумыҙ. (*Тәрбиәсе ҡумыҙҙа уйнап күрһәтә.*) Афарин, балалар! Был эште үтәгән өсөн бер таж (*тәрбиәсе һүрәткә таж йәбештерә.*)
**Тәрбиәсе:** Йомаҡ ҡоям, яуабы нисек булыр икән?

Бәләкәй генә көпшәлә
Уйылғандар тишектәр.
Моңло тауыш сығарһа
Бейеп китә ситектәр. (Ҡурай)

Афарин! Башҡорт халҡының милли инструменты ҡурай тураһында презентация ҡарайыҡ. (*Аудиояҙмала ҡурай моңо.)*

Ҡурай – музыкаль инструмент. Башҡортостандың визит картаһы булған ҡурай үләне Урал тауҙарында үҫә. Кипкәс, көпшәне тишеп, музыкаль инструмент яһайҙар. Сәскәһе Башҡортостан Республикаһының флагына, гербына төшөрөлгән.

Ҡурай - Башҡортостандың 7 мөғжизәһенең береһе. Баймаҡ районында һәм Өфө ҡалаһында ҡурайға һәйкәлдәр эшләнгән. Йомабай Иҫәнбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Азат Айытҡолов, Роберт Юлдашев – билдәле ҡурайсылар.

***1.*** **Дидактик уйын “Ҡурай – Башҡортостан символикаһында”**

Башҡортостан Республикаһының флагы тураһында әңгәмә ойоштороу, һорауҙарға яуаптар биреү.

**Тәрбиәсе:** Балалар, Башҡортостан Республикаһының флагы ниндәй төҫтә, нимәне аңлата ? (Зәңгәр төҫ – күк йөҙө төҫө, күңел таҙалығын, аҡ төҫ – дуҫлыкты, йәшел төҫ – үлән төҫө, мәңгелекте аңлата.) Аҡ фонда нимә төшөрөлгән ? (Аҡ фонда ҡурай сәскәһе – 7 ырыуҙы берләшеүен аңлата.)

Гербта нимә төшөрөлгән ? (Салауат Юлаев, ҡурай сәскәһе, ҡусҡар орнаменты, артҡы фонда ҡояш). Кем ул Салауат Юлаев? (Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры.) Яҡшы. Яуаптарығыҙ өсөн тағы бер таж булды.

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡурайҙың уйнарға әҙер булыуын нисек белгәндәр – һөйләгеҙ әле.

2. **Уйын** “Ҡурай менән әңгәмә”. Ике бала ҡурай тотоп, диалог ойоштора.

- Ҡурай!
- Әү!
- Ҡайҙа үҫтең ?
- Урманда.
- Кем ҡырҡты ?
- Ҡурайсы.
- Ни өсөн ?
- Уйнарға.

**Тәрбиәсе**: Афарин, балалар! Ҡурай оҫтаһы үләнде 8 тотамға бүлеп ҡарай. Әгәр 8 тотам була икән, тимәк, уны киҫеп, тишек уйып уйнарға мөмкин.

**Хәрәкәтле уйын** “ Ҡурайсы”

Балалар түңәрәккә баҫалар. Уртала ҡурайсы тора.
Ҡурай тауышын ишетеп,
Беҙ сығабыҙ болонға. (Балалар йырлап йөрөйҙәр.)
Ҡурайсы менән бергә
Түңәрәктә уйнарға. (Тыпырлайҙар.)
Һай, һай, һай, һай,
Матур, йәшел болонда (Түңәрәкте ҡыҫалар, унан киңәйтәләр)
Ҡурайыңдаңы беҙгә бир ҙә
Үҙең ҡарама бында. (Балалар сәпәкәйләй, ҡурайсы бейеп 2 баланың араһына барып баҫа, улар ике яҡҡа йүгерәләр, кем беренсе ҡурайҙы ала – шул ҡурайсы була.)

4. **Дидактик уйын “Музыкаль инструменттар”** .

5.

Балалар магнит таҡтаға музыкаль инструменттарҙың һүрәтен башҡорт милли уйын ҡоралына һәм классик инструменттарға бүлеп ҡуялар. Бер яҡҡа ҡумыҙ, ҡурай, мандолина, ҡурай, икенсе яртыһына пианино, скрипка, аккордеон, барабан һүрәттәре ҡуйыла.

**Тәрбиәсе:** Афарин, балалар! Тағы ла бер таж алдығыҙ.

6. **Дидактик уйын "Ҡурай – халыҡ ижадында".**

Балалар ҡурай тураһында әкиәт, мәҡәлдәрҙе иҫкә төшөрәләр.

**Тәрбиәсе**: Балалар, ҡурай тураһында ниндәй әкиәттәр беләһегеҙ? ("Ҡурай", "Ҡурай моҥо", "Ҡурай тарихы" әкиәттәре)

Ә мәҡәлдәр беләһегеҙме? Уларҙы нисек аңлайһығыҙ?

Ҡурай тартһаң, көй булыр, бүрәнә тартһаң өй булыр. (Ҡурайҙа күп уйнаһаң, тырышһаң – матур итеп уйнарға була, бүрәнә менән эшләһәң – өй була.)

Сит кеше ҡурайына бейемә. (Үҙ-үҙең булып ҡалырға кәрәк.)

Ҡурай халыҡ күңелен юрай. (Музыканың кешегә тәҫьире көслө).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ яуап биргән өсөн һеҙгә тағы ла бер таж.

7. **Аппликация "Янсыҡ".** Балалар материалдар менән янсыҡ эшләйҙәр.

**Тәрбиәсе:** Балалар, бына бөгөн һеҙ өләсәйем һандығынан башҡорт әйберҙәре менән таныштығыҙ. Әйҙәгеҙ, ҡурай сәскәһе менән биҙәп, янсыҡ эшләйек.

Балалар янсыҡ эшләйҙәр, ҡурай сәскәһен киҫеп йәбештерәләр.

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ 7 тажды ла йыйҙығыҙ. Тимәк, биремдәрҙе теүәл үтәнегеҙ. Өләсәй һандығынан һеҙгә бүләк - әкиәттәр китабы.

**Йомғаҡлау. Рефлексия.** Йомғаҡ менән йомғаҡлау яһау.

**Тәрбиәсе:** Балалар, бында кемдер йомғаҡты һүтеп киткән. Епте йомғаҡҡа урай-урай, дәрескә йомғаҡлау яһайыҡ. Беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләштек? Нимә белдегеҙ? Нимә ауыр булды? Нимә оҡшаны? Афарин. Йомғаҡты һандыҡҡа һалып ҡуяйыҡ.



## Ҡомартҡылар менән танышыу







**Ҡурай менән диалог**





**Хәрәкәтле уйын “Ҡурайсы”**



**Дидактик уйын “Музыкаль инструменттар”**

